Сибай ҡала округы
Хакимиәтенең ҡала мәғариф бүлеге
Мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһе
“Бала үҫтереү үҙәге - “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы

Йәш тәрбиәселәр өсөн консультация

# "Бала ауыҙынан. Балаларҙың телмәрен үҫтереү алымдары"

Уҡытыусы-логопед:
Харисова М.Р.

СИБАЙ-2010

**Һүҙлек эше**

Ике йәштән өс йәшкә тиклемге балаларҙы телмәр үҫешендә баланың күпме һүҙ белеүен, күпме һүҙҙе ишетер ҡабатлауы тцраһында ҡайғыртыр кәрәк. Шуға күрә һүҙлек эшен байыртыу өсөн эште тирә йүнде өйрәтү эше менән тығыҙ бәйләргә кәрәк.

Был йәштәге балалар өлкәндәрҙең телмәрендәге айырым һүҙҙәрҙе генә түгел, ҡыҫҡа һөйләмдәрҙе лә еңел ҡабатламайҙар. Баланың актив һәм пассив телмәрендә ҙур айырма һәр ваҡыт балаларҙы яңы нәмә менән тәьмин итергә тейеш. Был маҡсатты “тап”, “алып кил”, “күрһәт” һ.б. кеүек эштәрҙе киң ҡулланыр кәрәк. Был эштәр тәрбиәсегә бала һүҙҙең нимә тураһында барыуы, пассив һүҙ байлығында яңы һүҙҙәр барлыҡҡа килеү килмәүен асыҡларға ярҙам итә.

Балаланы яңы һүҙ менән таныштырғанда балаға таныш булған һүҙҙәр менән бер нисә тапҡыр һүҙҙе ҡабатларға кәрәк (тауыҡ сүпләй, сүпләй, унын суҡышы; себештәрҙә сүпләй) һ.б.

Түбәндәге уйын күнегеүҙәрҙе тәҡдим итергә була:

Ҡурсаҡҡа һауыт-һабаны иҫендә ҡалдырырға ярҙам итәйек (кейем – һалым, өй йыһаҙдары, уйынсыҡтар, һ.б.).

“Ҡайҙа нимәне һалырға?”(күлдәк – шкафҡа элергә, алма – һауытҡа һалырға, һ.б.).

“Нимә үҙгәрҙе?” (Айгөл сарафанын сисеп йылы күлдәк кейҙе, өҫтәлдә хәҙер ике бәйеләй ята, һ.б.).

“Кемдең балаһы? Кемдең әсәһе?” (хайуандарҙы төркөмләү; ҙур хайуандар - балалары).

“Дөрөҫ әйт” (был ҙур бәшмәк, ә эргәһендә бәләкәй һ.б.).

“Әйт”. Был күнегеү балалар өйрәнгән әкиәттәрҙе, шиғырҙарҙы ҡабатлағанда, балаларға яҡындан таныш булған темаға хикәйәләр төҙөгәндә ҡулланыла.

Мәҫәлән, тәрбиәсе һөйләй башлай, ниндәйҙер һөйләмде әйтеп бөтөрмәйенсә һорау бирә (“Был бисәй. Ул бәләкәй, йомшаҡ. Ул асыҡҡан. Айгөл уға нимә бирә?” – “Һөт” – “Айгөл һөттө ҡайҙа ҡойҙо?” – “Һауытҡа” һ.б.).

## Өндәр өҫтөндә эш

Был йәштәге балаларҙа тәрбисе ишетеү һәләтлелеге өндәрҙе аңлау һәм дөрөҫ әйтелешен ҡабатлауға үҙ эшен йүнәлтергә тейеш.

Өндәрҙе дөрөҫ өйрәтеү айырым дәреҫтәрҙә үткәрелә, тағыла өндәрҙе дөрөҫ өйрәнеү буйынса ишетеү иғтибарлығын үҫтереү буйынса, тирә йүнде өйрәнеү дәресендә дөрөҫ тын алышын тормошҡа ашырыу өсөн айырым күнегеүҙәр үткәрелә.

Өндәрҙе дөрөҫ әйтеүҙең төп сәбәбе булып ишетеү һәләтлелеген үҫеше тора. Балалар өндәрҙе әйтеү һәм өндәрҙе айыра ишетә белә.

Балаларҙы тауыш аппараты менән дөрөҫ ҡулланырға өйрәтергә кәрәк (тәрбиәсегә оҡшарға теләп бала тауышын һәм һөйләшеү тиҙлеген үҙгәртә).

Ишетеү һәләтлелеген камиллаштырыу буйынса айырым күнегеүҙәр үткәрелә ("Кем саҡыра?", "Нимә тауышлана?" һ.б.).

Өндөң әйтелешен өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүлергә кәрәк. Йыл әйләнәһенә шышылдаусы (ис, ш, ч, щ) шулай уҡ л, р өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен өйрәнәләр. Өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен өйрәнеү һуҙынҡы өндәрҙән а, ә, у, ү, о, ө, и һәм артикуляция буйынса ябый тартынҡы өндәр м, п, б, , в, ф башлана.

Балала өндәрҙе дөрөҫ әйтеүҙе камиллаштырыу барышында артикуляция аппаратын ауырыраҡ өндәрҙең дөрөҫ әйтелешенә әҙерләйҙәр. мәҫәлән, һыҙғырыусы с, з өнө н өнөнөң артикуляцион ҡуйылышы менән оҡшағандар. Т өнөн дөрөҫ әйтеп өйрәнеү күнекмәләре Ц өнөн дөрөҫ итеп әйтергә өйрәтеүҙә ҙур ярҙам итә.

Өндө дөрөҫ әйтеп өйрәнеү эше бер нисә этаптан тора. Балаларҙы иң беренсе айырым өндәрҙе һәм ауыр булмаған һүҙ бәйләнештәренең дөрөҫ әйтеүҙәренә күнекмәләр үткәрәләр. Күпселек осраҡта телмәрҙә тауышҡа оҡшатыу ҡулланыла. Баланы өн менән таныштырғанда билдәле бер образ менән бәйләргә кәрәк (у өнө - паравоз ҡысҡыра, һ.б.). тәрбиәсе баланың һүҙ бәйләнешен әйткәндә алдан өйрәнелгән өндәрҙе нисек әйтеүен күҙәтә.

Артабанғы этаптарҙа өндөң дөрҫ әйтелешен һүҙ составында камиллаштыралар. Тәрбиәсе өндөң дөрөҫ әйтелешен генә түгел шулай уҡ һүҙҙең аныҡ һәм асыҡ ишетерлек итеп әйтеүҙәрен талап итә. Күнегеүҙәр өсөн бер ижекле һүҙҙәр ҡулланыла (өй, һ.б.). артабан өндө ҙур булмаған һөйләмдәрҙә нығыталар.

Балаларҙың телмәрендә өндө дөрөҫ әйтмәүҙән башҡа, һүҙҙең ялғауын йәтеп бөиөрмәү. Һүҙҙе ҡыҫҡартыу, өндәрҙе, ижектәрҙе төшөрөп ҡалдырыуҙар күҙәтелә. Бала һәр ваҡытта ла өлкәндәрҙең артынан өс һәм унанда күп ижекле һүҙҙәрҙе ҡабатлай алмай.

Тәрбиәсе балаларҙың тартынҡы өндәрҙе тауышты оҡшатҡан (му-у, һ.б.) нисек әйтеңҙәренә иғтибарын йүнәлтергә тейеш.

Бәләкәй балалр күпселек осраҡта шыбырлап әйтеү урынға ҡысҡырып йәки илап кенә әйтәләр. бер өндө төрлө тауыш менән әйтеү күнекмәләре ярҙамында тауыш аппаратын асырға (үҫтерергә) була. Киләсәктә балалның тасуири һөйләүендә интонацияны дөрөҫ ҡуйыуына ярҙам итә.

Балалның һүҙе, өндө , һөйләмде дөрөҫ әйтеү дөрөҫ тын алышына бәйле. Һулаған һауаны талған һәм оҙайлы итеп сығарыу өсөн балаларға төрлө эштәр бирелә, мәҫәлән, ниндәй ҙә булһа әйбергә, ҡағыҙға өрөү, һ.б., тағыла һуҙынҡы өндәрҙе оҙайлы итеп һуҙыу күнекмәләрен эшләү (уууу, ааа, һ.б.).

## Грамматик яҡтан телмәрҙе дөрөҫ үҫтереү

Тәрбиәсе балалар менән аралашҡанда һүҙҙәрҙе боҙоп әйтмәүҙәрен һәм һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен иҫтәренә төшөрә. балаларҙың һөйләмдә эйә, алмаш һәм хәбәрҙе дөрөҫ ҡуллана белеүҙәренә иғтибарҙы белергә кәрәк (мин йәшенәм, ә һин эҙлә, һ.б.).

Системалы рәүештә балаларҙы һүҙ һәм һөйләмдәр төҙөргә күнектереү. Берлектә хикәйә төҙөүҙе ойоштороу. Тәрбиәсе хикәйәнең темаһын әйткәндән һуң балаларҙың уға ярҙам итеүҙәрен һорай. Тәрбиәсе пауҙалар эшләй, шул

ваҡытта балалар һөйләмде әйтеп бөтөрәләр (мәҫәлән, “Беҙ прогулкаға сыҡтыҡ, тәрбиәсе ҡоштарға ем алып килде. Ем ....” – “Һауытта ята ине”, һ.б.).

Балаларҙы инсенировкаларҙа ҡатнашыу өсөн балаларға тәрбиәсе структураһы буйынса төрлөсә төҙөлгән һөйләмдәрҙе ҡабатлата (өндәү, һорау һөйләмдәр, һ.б.).

Берәй сәбәпкә бәйле һорауҙар телмәрҙең үҫешенә ярҙам итә (Ни өсөн? Ҡасан? Нисек?). бала һорауға яуап биргәндә, күпселек осраҡта ябай һөйләгән менән һирәк кенә бер нисә һүҙҙән торған һөйләм менән яуап бирергә тырыша. Был йәштәге балалрға һорауҙар ауыр булыуға ҡарамаҫтан тәрбиәсе иҫендә тотоп бала предметтар меән реаль мөнәсәбәтте алдараҡ аңлауына таянып һорауҙарҙы күберәк бирергә кәрәк.

## Бәйләнешле телмәр үҫеше

Дәрестә бала тәрбиәсенең телмәрен дөрөҫ аңлауына һәм яуап һорауҙарға яуап биреүенә, һөйләшеүҙә ҡатнашыуына ирешеү.

Тәрбиәсенең һорауы – телмәр активлығында һәм фекерләүҙә алып барыусы алым булып тора. Предметтарҙы ҡарап, күренештәрҙе күҙәтеп балалар айырым хәрәкәттәрҙе дөрөҫ әйтәләр, ләкин үҙ ара бәйләнештәрен асыҡлай алмайҙар. Уларҙы фекерләргә тәрбиәсе ярҙам итә. “Малай сәскәләргә һыу һибә” – бала һүрәткә ҡарап һөләй. “Ә лейкала һыу ҡайҙан барлыҡҡа килгән?” – тип тәрбиәсе ҡыҙыҡһына.

## Нәфис әҙәбиәт

Беренсе кескәйҙәр төркөмөндәге балаларға өйрәткән әҙәбиәт теҙмәһенә халыҡ әкиәттәре, йырҙар, шиғыпҙар инә.

Был йәштәге балаларға әкиәттәрҙе уҡырға түгел, ә һөйләргә тәкдим ителә. Балаларҙың иғтибарын йәлеп итеү өсөн тәрбиәсе һүҙ барышында балаларға төрлө имитация хәрәкәттәре (әбей менән бабайҙың шалҡан тартҡанын, һ.б.), күргәҙмә материалдары, уйынсыҡтар ҡулланыла.

Халыҡ ижады һәм әҙәби әҫәрҙәр менән таныштырыу. Бәләкәй күләмле әкиәттәр, хикәйәләр, һанашмаҡ, һамаҡтар уҡыла. Әүрәткестәр, мауыҡтырғыстар, һөйҙөргөстәр, йыуатҡыстар, сәңгелдәк йырҙары менән таныштыралар.

“Һөйләү өсөн әкиәттәр: “Төлкө менән айыу”, “Ҡуяндың ҡолағы ниңә оҙон булған?”, “Кем көслө”, “Шалҡан”, “Сыбар тауыҡ”, “Кәзә бәрестәре”, “Эш табылды”, “Ялҡау бесәй”.

Уҡыу өсөн:

“Кәҙекәйбил” (А. Йәғәфәрова), “Бутҡа көршәге” (Бертуған Гримдар), “Эт нисек үҙенә хужа тапҡан?”, “Ялҡау ҡыҙ”, “Себеш” (К. Чуковской), “Тирмә” (урыҫ халыҡ әкиәте), “Терпе” (А. Толстой) һ.б.

Шиғырҙар:

“Мин ҡуян” (Г.Юнысова), “Иркә бесәй” (Ф. Рәхимғолова), “Ҡурсағым” (Р. Хәйретдинов), “Шыршыҡай”, “Ҡыш бабай” (М. Бикбова), “Барыбыҙ ҙа шат” (Ғ.Ғүмәр), “Аҡ тауыҡ” (К. Кинйәбулатова), “Ҡолонсаҡ” (М. Хисмәтуллина), “Аҡбай дуҫ” (Р. Янбулатова), һ.б.